WWW.BASHGAZET.RU

1917 йылдың 14 июненән сыға

# Башҡортостан

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ГӘЗИТЕ

12+

Гәзитте ойоштороусылар – Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте

шишәмбе 11 сентябрь 2018 йыл

№ 104 (27506)

ҺАЙЛАУ-2018

## Йәмәғәтселек иңендәге ҙур яуаплылыҡ

### Халыҡ ихтыяры белдерелде

**Ошо дәүләттә йәшәгәс, йәмғиәтебеҙҙең айырылғыһыҙ бер өлөшө булғас, сәйәсәттән ситләшеү, ул ғына түгел, граждандыҡ бурысыңды үтәүҙән баш тартыу – һис килешмәгән эш. Ошо ябай, әммә мөһим тәғлимәттең раҫлығын Башҡортостан халҡы, һис шикһеҙ, аңлай һәм һәр ваҡыт төрлө кимәлдә үткән һайлауҙарҙа әүҙем ҡатнаша, ил һәм төбәк киләсәгенә бәйле үҙ тауышын әйтеп ҡалырға тырыша.**



Рәйеф Баҙыҡов фотоһы.

*Өфөләге 109-сы участкалағы һайлау барышынан күренеш.*

Бына әле лә, 9 сентябрҙә, Берҙәм һайлау көнөндә республика халҡы алтынсы саҡырылыш Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға депутаттар һайланы. Алдан уҡ күҙаллағанса, республика кимәлендәге һайлауға граждандар, ғәҙәттәгесә, ил Президентын һайлауға ҡарағанда аҙыраҡ килһә лә (йәмғиәттә сәйәси лидерҙар сәйәси институттарға ҡарағанда юғарыраҡ баһалана), Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһының мәғлүмәти йәһәттән ҙур эш башҡарғанын иҫәпкә алып, һайлау юғары кимәлдә үтте, уның барышында сифат йәһәтенән дә өр-яңы мөмкинлектәр ҡулланылды.

Әйткәндәй, сәйәси сараның мөһимлеген республика Башлығы Рөстәм Хәмитов та, һайлау участкаһына килеп, үҙенең граждандыҡ бурысын үтәгән саҡта тағы берҙе билдәләне:

– Һайлауҙар – тарихыбыҙҙың мөһим өлөшө. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай халыҡ тормошонда мөһим роль уйнай, депутаттар тормоштоң һәр даирәһе өсөн яуаплы. Дәүләт Йыйылышын ойоштороуҙа ҡатнашып, халыҡ та ошо йәһәттән дәүләт тормошона йоғонто яһай.

Статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, ғәҙәттә, һайлауҙарҙа ауыл халҡы әүҙемерәк ҡатнаша. Был ғәмәл 9 сентябрҙә тағы бер раҫланды, шул уҡ ваҡытта участкаларҙа йәштәрҙең күп булыуы ҡыуандырҙы: тимәк, йәш быуын ижтимағи процестарға әүҙем ҡушыла, үҙ һүҙен әйтеп ҡалырға тырыша.

Һайлауҙар менән бер рәттән, республиканың район-ҡалаларындағы мәғариф, мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында Асыҡ ишектәр көнө үтте. Халыҡ өсөн был сара ла ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле ине: бәғзеләр кулинария, косметология, декоратив-һынлы сәнғәт буйынса оҫталыҡ дәрестәре алһа, ауыл мәҙәниәт йорттарында урындағы һәүәҫкәрҙәр концерт программалары әҙерләгән. Шулай уҡ күргәҙмәләр, спорт бәйгеләре, экскурсиялар, презентациялар, төрлө конкурстар, викториналар ҙа ойошторолдо. Күп кенә ҡала мәктәптәрендә йәрминкәләр уҙҙы. Көҙгө муллыҡ осоронда үткәрелгән был сараны халыҡ та, балалар ҙа ярата. Ҡайһы бер һайлау участкаларының мәғариф учреждениеһында урынлашҡанын иҫәпкә алғанда, халыҡ бер юлы граждандыҡ бурысын да үтәй алды, файҙалы сарала ла ҡатнашты.

Һандарға килгәндә, Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы мәғлүмәттәре буйынса, 9 сентябрҙәге һайлауҙарҙа 18 йәше тулған 19 618 кеше беренсе тапҡыр ҡатнашты. Шулай уҡ исемлектәрҙә утыҙ йәшен үткән 585 633, 80 йәшен уҙған – 137 035, 100 йәште уҙған 155 һайлаусы теркәлгәйне.

Республиканың бер нисә "исемле" участкаһында юғары әүҙемлек күҙәтелде. Мәҫәлән, Бәләбәй районының Надеждино ауылындағы Сергей Аксаков исемендәге, Илеш районында М. Гәрәев исемендәге участкаларҙа халыҡ иртәнән ҙур әүҙемлек күрһәтте.

Нисек кенә булмаһын, йәмәғәтселек иңенә ғәйәт ҙур яуаплылыҡ һалған был һайлауҙар ҙа тарихта ҡалды, ә депутат мандатына эйә булған кешеләрҙең киләсәктә республикабыҙ өсөн файҙа килтереүен, йәмғиәтебеҙҙәге йәшәйеш сифатын күтәрерлек закондар ҡабул итеүен, аныҡ эше менән кешеләргә ярҙам итеүен һәм һайлаусыларҙың ышанысын аҡлауын теләргә ҡала.

**Гүзәлиә БАЛТАБАЕВА.**

ТОРМОШ ҺУЛЫШЫ

## "Һайлау ғәҙел үтте"

**Кисә "Берҙәм Рәсәй" партияһы рәйесе, Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев видеоконференция тәртибендә төбәктәр менән Берҙәм тауыш биреү көнө йомғаҡтары буйынса селектор кәңәшмәһе үткәрҙе. Унда Башҡортостан Башлығы, партияның Юғары советы ағзаһы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты.**

Дмитрий Медведев "Берҙәм Рәсәй"ҙең һайлауҙа яҡшы һөҙөмтә күрһәтеүен билдәләне.

— Партия тотороҡло сығыш яһаны. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, һайлау үткән Федерация субъекттарындағы барлыҡ закондар сығарыу органдарында тиерлек алдынғылыҡты һаҡлап ҡала, — тине партия рәйесе.

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаттарын һайлауға килгәндә, Дмитрий Медведев сараның етди һәм конкурентлы шарттарҙа уҙыуы хаҡында әйтте.

Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов үҙенең сығышында республикала һайлауҙың уңышлы үтеүен билдәләне.

— Һайлау ғәҙел, ғәҙәти, тыныс шарттарҙа үтте, — тине ул.

## Пенсионерҙарға төбәк ташламаһы һаҡлана

**Ошо көндәрҙә Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың сираттан тыш 55-се ултырышы булды. Көн тәртибенә "Берҙәм Рәсәй" партияһы фракцияһы ағзалары тарафынан тәҡдим ителгән "Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы Көстәр ветерандары тураһында"ғы Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү хаҡында"ғы закон проекты индерелде. Парламентарийҙарҙың башланғысын республика Башлығы Рөстәм Хәмитов та хупланы.**

Тәҡдим ителгән үҙгәрештәр Башҡортостанда, пенсионер статусын алыу-алмауға ҡарамаҫтан, пенсия йәшендәге кешеләрҙең төбәк ташламаларын һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелә.

Парламент Рәйесе әйтеүенсә, һүҙ бер нисә социаль ярҙам төрө хаҡында бара. Уларға хеҙмәт ветерандары өсөн торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙә айлыҡ аҡсалата компенсация, оҙайлы эш стажына эйә булған ветерандарға, хеҙмәт ветерандарына айлыҡ аҡсалата түләүҙәр, маҡтаулы исеме һәм айырым хеҙмәттәре булған кешеләргә пенсияға өҫтәмәләр инә.

– Киләһе йыл ошондай ташламалар биреүгә 3,8 миллиард һум самаһы аҡса бүлеү күҙаллана, – тине Константин Толкачев.

Закон проекты тулыһынса ҡабул ителде. Ә яңы закон киләһе йыл 1 ғинуарҙан көсөнә инә.

## Түләү күпме?

**Башҡортостан Хөкүмәте йылылыҡ өсөн түләүҙең яңы системаһына күсеү ваҡытын кисектерергә ҡарар итте. Әлегә тиклем республиканың 17 муниципалитеты 1 октябрҙән, йәғни йылытыу миҙгелендә генә хеҙмәт өсөн, түләй башлаясаҡ тип күҙаллана ине.**

Әммә коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡтың артыу индексының саманан тыш үҫеү ихтималлығы арҡаһында ошо көндәрҙә республика Хөкүмәте яңы системаға күсеү тураһындағы ҡарарҙы ғәмәлдән сығарҙы. 2018–2019 йылдарҙа йылытыу миҙгелендә хаҡ һәм уны түләү тәртибе үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ.

## Көҙгә йәм өҫтәне йәрминкәләр

**Йәкшәмбелә Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, мәҙәниәт һәм спорт учреждениеларында Асыҡ ишектәр көнө үтте. Шулай уҡ мәктәптәрҙә ата-әсәләр йәрминкәләр ойошторҙо.**



Р. Мусина фотоһы.

Өфө ҡалаһының Фатима Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы ихатаһы ла байрамса биҙәлгән. Унда һәр класс өҫтәлен ҡуйып, йәшелсә-емеш, ҡайнатмалар, ҡорт балы, төмлекәстәр, бәлеш кеүек төрлө ҡамыр ризыҡтары, бәйләп һәм сигеп эшләнгән әйберҙәр һата. Гимназияла урынлашҡан 418-се һайлау участкаһына тауыш бирергә килгәндәр иһә осһоҙ хаҡҡа әйберҙәр, аҙыҡ-түлек алып кинәнә.

## Көндәр һыуыта

**Ошо көндәрҙә Башҡортостанда ҡырау төшөүе көтөлә. Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты быға бәйле иҫкәртеүҙәр яһаны.**

10 – 12 сентябрҙә республикала һауа температураһының минус 3 градусҡа тиклем түбәнәйеүе ихтимал. Ҡырауҙың ауыл хужалығы сәсеүлектәренә, баҡсалағы үҫентеләргә етди зыян килтереүе мөмкин. Юлдарҙа боҙлауыҡ булыу сәбәпле, водителдәргә иғтибарлы булыу шарт.

**Л. ДӘҮЛӘТБӘКОВА, Р. ХӨСНУЛЛИНА әҙерләне.**

УРАҠ

## Тир түгеп табыла икмәк

### Ер эшендә уңыш еңел бирелмәй

**Аяҙ көндөң һәр минутын файҙаланырға тырышҡан игенселәр өсөн иң ҡыҙыу осор башланды. Шуға күрә хеҙмәт кешеһен хужалыҡта осратырмын тимә, ни тиһәң дә, "йәйҙең бер көнө ҡышты туйҙырған" мәл. Беҙ барғанда, Әбйәлил районының "Аграрий" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте комбайндары икһеҙ-сикһеҙ баҫыуҙарҙы иңләй, ҡеүәтле "КамАЗ"дар бураларға иген ташый ине. Шулай ҙа иген батырҙары, баҫыу караптарын бер нисә минутҡа ҡалдырып, беҙҙең менән аралашырға ваҡыт тапты.**



Автор фотоһы.

*Йәш агроном Фәнзил Тайыпов комбайнсылар Йәмил Ғәбитов һәм Шамил Хәйбуллин менән.*

Ғөмүмән, ер кешеһенә уңыш еңел бирелмәй. Быйыл да игенсе өсөн йыл уңай булманы, шуға күрә әсе тир менән һуғарылған һәр башаҡты ҡалдырмай, булғанын түкмәй-сәсмәй урып йыйырға тырыша әбйәлилдәр. Хужалыҡтың баш агрономы Фәнзил Тайыпов әйтеүенсә, яҙ көнө бөтәһе 650 гектар майҙанда бойҙай, 250 гектарҙа — арпа, 180 гектарҙа һоло сәселгән. Шулай уҡ техник культураларға ла өҫтөнлөк бирелгән. Ҡарабойҙай, борсаҡ, етен, горчица, көнбағыш баҫыуҙарында уңыш юҡ түгел. Әлбиттә, көткән өмөттәр аҡланмаһа ла, быйылғы йылдың һауа торошона ҡарап, булғанына ҡәнәғәтләнергә тура килә.

Нисек кенә булмаһын, бигерәк тә көньяҡ-көнсығыш райондарҙа, уңыш йыйыу һауа шарттарына бәйле. Бында орлоҡтоң элиталы булыуы ла, техниканың сит илдә етештерелеүе лә мөһим түгел, төбәк тәбиғәтенең үҙ ҡануидары хакимлыҡ итә.

Фәнзил Фәнис улы фекеренсә, көндәр аяҙ торғанда сентябрь урталарына урақты тамамларға мөмкин. Арпа гектарынан 15 центнер уңыш биргән. Йылдың ҡоро килеүе иген культураларының төшөмөн кәметһә лә, хафаланырға урын юҡ. Иң мөһиме — игенгә хаҡ кәмемәһен, уны ваҡытында һатырға кәрәк. Техник культураларҙың баҙарҙа хаҡы юғары, тик быйылғы тәбиғәт шарттары уларға ла йоғонто яһамай ҡалманы.

Хужалыҡ тулыһынса техника менән тәьмин ителгән, яғыулыҡҡа ҡытлыҡ юҡ. Эшселәр иртәнән кискә тиклем баҫыуҙа тир түгә. Уларға өс тапҡыр йылы аш менән туҡланыу ойошторолған. Ашнаҡсы Йәмилә Рыҫҡолова ошонда уҡ тәмле аш-һыу әҙерләй.

Игенселәрҙең кәйефе көр, быға дәртләндереү сараларының булыуы ла булышлыҡ итә. Сөнки һәр эшсегә йыл һайын тейешенсә ашлыҡ, бесән бирелә. Әйткәндәй, хужалыҡтың күп ере — пайсыларҙыҡы. Шуға күрә пай ерҙәре өсөн иҫәпләшеүгә лә килешеү төҙөлгән.

Әлбиттә, тырыш хеҙмәтсәндәр булмаһа, бер ниндәй уңышҡа өлгәшеп булмаҫ ине. Комбайнсылар Йәмил Ғәбитов, Шамил Хәйбуллин, Варис Вәлиев, Йәмил Йәһүҙиндәрҙең тырышлығы менән ашлыҡ ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйып алынһа, уны ташыуҙа Зариф Вәлиев, Илгиз Мөхәмәткилдин, Юнир Йәһүҙин көс түгә.

Хужалыҡтың малсылыҡ тармағы ла ҡышҡа тулыһынса әҙер, шартлы рәүештә бер баш малға 30 центнерҙан ашыу мал аҙығы тупланған.

...Баҫыу караптары бер-бер артлы ҡуҙғалып, яланды иңләй. Ауыл кешеһе өсөн иң матур мәл был. Тормошобоҙ ниндәй генә үҙгәрештәр кисермәһен, игенсе хеҙмәтенән дә юғары, икмәк тәменән дә татлыраҡ,ураҡ мәленән дә күркәмерәк осор юҡ. Шуға күрә игенселек әле лә иң ихтирамлы һәм ауыр хеҙмәттәрҙең береһе булып ҡала. Әйткәндәй, хужалыкта эшләгән йәш агроном Фәнзил Тайыпов Башҡортостан университетын тамамлап, һис икеләнеүһеҙ тыуған яғына эшкә ҡайтҡан. "Был эш миңә бәләкәйҙән таныш, ерҙе яратам", — ти ул. Кәләше Гөлиә Сәғит ҡыҙы менән Ибраһим һәм Фатима исемле балалар үҫтерә. Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү программаһына ярашлы, улар үҙ көстәре менән Аҫҡарҙа яңы йорт һалып сыҡҡан.

**Кәримә УСМАНОВА.**

Әбйәлил районы.

## "Берҙәм Рәсәй" алға сыҡты

**Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев алтынсы саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға депутаттар һайлау кампанияһының һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. Унда ике исемлек буйынса ла "Берҙәм Рәсәй" партияһы иң күп тауыш йыйған.**

Төбәк парламентында "Берҙәм Рәсәй" партияһы 110 мандаттың 79-ын алған. Рәсәй Федерацияһының Коммунистар партияһы 15 мандатҡа, Рәсәйҙең либераль-демократик партияһы – ете, "Ғәҙел Рәсәй" – биш, "Рәсәй патриоттары" – ике, "Йәшелдәр" партияһы ике мандатҡа эйә булған.

Дөйөм алғанда, һайлау кампанияһында ун партия ҡатнашҡан, әммә закон буйынса уларҙың биш проценттан күберәк тауыш йыйғандары ғына парламентҡа үтә ала. Партия исемлеге буйынса "Берҙәм Рәсәй" 35, КПРФ – 11, ЛДПР – 6, "Ғәҙел Рәсәй" 3 мандатҡа эйә булған.

Бер мандатлы округтар буйынса алты партия вәкиле, уларҙың араһынан "Берҙәм Рәсәй" партияһы тәҡдим иткән 44 кандидат үткән, КПРФ-тан – дүрт, "Ғәҙел Рәсәй"ҙән – ике, "Рәсәй патриоттары"нан – ике, ЛДПР-ҙан – бер, "Йәшелдәр" партияһынан – бер. Шулай уҡ үҙ-үҙен күрһәткән бер кандидат еңеүгә өлгәшкән.

Бынан тыш, республиканың 21 муниципалитетында урындағы үҙидаралыҡ органдарына өҫтәмә һайлау уҙҙы. Тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса уларҙағы 37 депутат мандатының 32-һе "Берҙәм Рәсәй" партияһы вәкилдәренә эләккән, шулай уҡ "Социаль ғәҙеллек өсөн Рәсәй пенсионерҙары партияһы"нан – бер, үҙ-үҙен тәҡдим иткән дүрт кешегә ышаныс белдерелгән.

Берҙәм һайлау көнөндә һайлау хоҡуғына эйә булғандарҙың 49,08 проценты үҙенең граждандыҡ бурысын үтәгән, 2013 йылда был һан 52,84 процентҡа тиң булған. Өфөлә – 29,44, ҡалаларҙа – 40,57, райондарҙа халыҡтың 61,91 проценты сәйәси сарала ҡатнашҡан.

Һайлау кампанияһы ваҡытында Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһында эшләгән "ҡыҙыу бәйләнеш" телефонына төрлө һорауҙар менән 328 кеше шылтыратҡан.

**Рәмилә МУСИНА.**




"Башинформ" агентлығы сайтынан.

МАТБУҒАТ

## Сәпиттә елә-елә, гәзит өйөмә килә

**Хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

2019 йылдың тәүге яртыһына матбуғатҡа яҙылыуҙың төп осоро башланды. Гәзитебеҙгә яҙылып, уға тоғро ҡалған дуҫтарыбыҙға матур бүләктәр әҙерләнек. Квитанция күсермәһен редакцияға ебәргән тәүге 50 кеше 2019 йылға "Башҡортса дини календарь" алып ҡыуанасаҡ. Унан тыш, бағыусыбыҙ – "Маҡар урман хужалығы" дәүләт автономия идаралығы 50 кешегә "Көньяҡ Уралдан боланут (иван-чай)" сәйе бүләк итә. Йыл аҙағында уйнатыласаҡ лотереяла велосипед, көнкүреш электр тауарҙары – сәйнүктәр, үтек, фен, блендер һәм башҡа әйберҙәр оттороласаҡ.

Квитанция күсермәһен редакцияға почта, WhatsApp ҡушымтаһы аша **89177901571** номерына, электрон адресҡа **(bashgazet@mail.ru)** ебәрергә була. Белешмәләр өсөн телефон: **(347) 272-62-61; 273-83-92.**

Хаҡтар түбәндәгесә:

**П2729 индексы (аҙнаһына өс тапҡыр) – 1486 һум 14 тин.**

**П3030 индексы – йома (аҙнаһына бер тапҡыр) – 675 һум 36 тин.**

**Электрон версия – 834 һум (rbsmi.ru сайтына инеп йәки редакция аша яҙылырға мөмкин)**

**П3372 индексы (бер йылға) – 2745 һум 25 тин.**

*Һеҙҙән хат-хәбәрҙәр көтәбеҙ, дуҫтар!*

**БЕРГӘ БУЛДЫҠ – БЕРГӘ ҠАЛАЙЫҠ!**